**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Муниципальное казенное учреждение "Отдел образования городского округа город Стерлитамак Республики Башкортостан**

**Администрация городского округа город Стерлитамак Республики Башкортостан**

**МАОУ "СОШ №34"**

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
| --- | --- | --- |
| На заседании ШМО | Зам.директора | Директор МАОУ "СОШ №34" |
| ________________ | ________________ | ________________ |
| Резникова Ф.А. | Гизатуллина Н.А. | Муращев И.М. |
| Протокол №1 от "30" августа 2023 г. | Приказ №313 от "30" августа 2023 г. | Приказ №313 от "30" августа 2023 г. |

**РАБОЧАЯ ПРОГРАММА**

**учебного предмета "Родной (башкирский) язык"**

для обучающихся 1-4 классов

**Стерлитамак 2023**

## АҢЛАТМА ЯҘЫУ

Башланғыс дөйөм белем биреүҙең 1-4 кластары өсөн «Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының эш программаһы (артабан – Программа) һәр уҡыу йылына предметтың йөкмәткеһен, уҡытыуҙың төп методик стратегияларын, «Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметы алымдары аша уҡыусыларҙы тәрбиәләү юлдарын билдәләй, ул дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4-се кластары өсөн «Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының өлгө эш программаһы (Төҙөүсеһе: Нафиҡова З.Ғ., 2022й.) нигеҙендә төҙөлгән.

Программаның норматив базаһы:

– Рәсәй Федерацияһының конституцияһы;

– «Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында» Федераль законы (29.12.2012, №273-ФЗ);

– «Рәсәй халыҡтары телдәре тураһында» Рәсәй Федерацияһы законы (үҙгәреш һәм өҫтәлмәләр менән) (25.10.1991 №1807-1);

– Башланғыс дөйөм белем биреүҙең Федераль дәүләт белем биреү стандарттары (Рәсәй Федерацияһының мәғариф министрлығы тарафынан 31.05.2021 раҫланған, № 286);

– Башланғыс дөйөм белем биреүҙең өлгө төп белем биреү программалары (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡытыу-методик берләшмәһе ҡарары менән раҫланған, протокол № 1/22 18.03.2022);

– Өлгө тәрбиә программалары(дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡытыу-методик берләшмәһе ҡарары менән раҫланған, протокол № 3/22 23.06.2022).

Программа нигеҙендә федераль дәүләт белем биреү стандарттарының методологияһын тәшкил иткән системалы эшмәкәрлек ҡарашы ята.

Программа Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының башланғыс дөйөм белем туған (башҡорт) телендә алып барылған мәғариф ойошмалары өсөн эшләнде, ул шулай уҡ «Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу» предмет өлкәһен алып барған уҡытыусыларға методик ярҙам күрһәтеүгә лә йүнәлтелгән.

Программа йөкмәткеһе системалы эшмәкәрлек принцибына ярашлы төҙөлгән һәм федераль дәүләт белем биреү стандарттарының «Туған телдә әҙәби уҡыу» предмет өлкәһенә ҡаралған башланғыс дөйөм белем биреү программын үҙләштереү һөҙөмтәләренә ирешеүгә йүнәлтелгән.

Программа башҡорт телендә аралашҡан һәм үҙ телен белгән уҡыусылар өсөн төҙөлгән. Дәреслек һәм эш программаһын төҙөүсе авторҙар уҡыу материалының күләмен һәм йөкмәткһен киңәйтә, балаларҙы үҫтереү һәи тәрбиәләүгә булышлыҡ иткән эш төрҙәрен тәҡдим итә ала.

Эш программаһын тормошҡа ашырыуҙа белем биреү ойошмаһы һәр төрлө белем биреү технологияларын, электрон уҡытыу сараларын, дистанцион уҡытыу ресурстарын ҡулланыу хоҡуғына эйә. Шулай уҡ Программаны үҙләштереүҙә модуль принцибы ла ҡулланылырға мөмкин.

Уҡыусыларҙың белемгә ихтыяжын һәм ҡыҙыҡһыныуҙарын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында үҙләштерелә торған программа сиктәрендә мәғариф ойошмаларының локаль акттарында ҡаралған тәртиптә индивидуаль уҡыу, шул иҫәптән тиҙләтелгән уҡытыу пландары эшләнеү мөмкинлеге лә күҙ уңында тотола.

Программа йөкмәткеһе дәрестән тыш эшмәкәрлектә лә тормошҡа ашырыла ала: предмет аҙналыҡтары, экскурсиялар, мәктәп кимәлендәге тематик саралар, конкурстар һ.б.

**«Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметына дөйөм характеристика**

Туған әҙәбиәт – тормошто танып-белеүҙең үҙенсәлекле ысулы, төп милли-мәҙәни ҡиммәт һәм донъя мәҙәниәте күренеше, әхлаҡ һәм традицияларҙы һаҡлау һәм тапшырыу сараһы.

Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу – башланғыс класс уҡыусыларын әҙерләү системаһында мөһим предметтарҙың береһе, сөнки ул уҡыусыларҙың донъяны позитив һәм тулайым ҡабул итеүенә, әхлаҡ һәм яуаплы үҙаң тәрбиәләүгә булышлыҡ итә.

Шулай уҡ предмет саралары ярҙамында уҡыусыларҙың функциональ грамоталылығы формалаша. Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу курсын уңышлы үҙләштереү, туған тел, рус теле һәм рус телендә әҙәби уҡыу менән предмет-ара бәйләнешен һәм шулай уҡ «Туған (башҡорт)әҙәбиәте (5-9-сы кластар)» дисциплинаһы менән бәйләнеште иҫәпкә алып, башланғыс белем биреүҙәге башҡа предметтарҙы һөҙөмтәле өйрәнеүгә булышлыҡ итә.

Башланғыс белем биреү кимәлендә туған әҙәбиәтте өйрәнеү динамик уҡыуҙың дөйөм уҡыу күнекмәһен һәм текст, мәғлүмәт менән эшләй белеү һәләтен формалаштыра, шулай уҡыусының күҙәтә, сағыштыра, анализлай, эҙләнеү эштәре процесында уҡыу материалын дөйөмләштерә белеүҙәрендә сағылыш тапҡан психик функцияларын (телмәр, фекерләү, хәтер, иғтибар һ.б.) үҫтерә.

«Туған (башҡорт) теленән әҙәби уҡыу» курсы нигеҙендә башҡорт әҙәбиәтенең милли мәҙәниәттәр өсөн берҙәм ҡиммәттәр системаһы коды булыу идеяһы ята. Әҙәбиәт ул ҡиммәттәрҙе һаҡлау ғына түгел, үҫеп килеүсе быуынға тапшырыу, бала аңында бөгөнгө менән киләсәкте бәйләп тороусы сара ла булып тора.

Уҡыу предметы йөкмәткеһенә башҡорт теленә тәржемә ителгән Рәсәй һәм сит ил әҙәбиәте индерелгән. Улар араһында рус классиктары А.С.Пушкин, Л.Н.Толстой, А.П.Чехов, Н.А.Некрасов һәм билдәле балалар яҙыусылары В.А.Осеева, В.В.Бианки әҫәрҙәре айырым урын алып тора.

Бынан тыш «Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» өлгө программаһының материалы уҡыусыларҙы донъя фольклоры (украин, татар, дағыстан, рус, һинд, япон, халыҡ экиәттәре); рус әҙәбиәте әҫәрҙәре (М.Пришвин, С.Михалков, П.Синявский, В.Маяковсский һ.б); сит ил әҙәбиәте әҫәрҙәре (Э.Хемингуэй, О.Уайльд, бер туған Гриммдар, Ш.Перро һ.б.) менән таныштырыуға йүнәлтелгән.

Үрҙә һанап үтелгән текстар балаларға граждანлыҡ, патриотик, әхлаҡ, хеҙмәт, экологик тәрбиә биреүҙе маҡсат итеп ҡуя, әҙәбиәтте милли һәм донъяуи мәҙәни күренеш итеп күҙалларға мөмкинлек бирә.

**«Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының маҡсаты һәм бурыстары**

«Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының маҡсаты – башҡорт телендә дөрөҫ, аңлы, йүгерек һәм тасуири уҡырға өйрәтеү; телмәр эшмәкәрлеген үҫтереү; әхлаҡ нормаларын формалаштырыу һәм туған мәҙәниәтебеҙҙең мөһим өлөшө булған әҙәбиәткә үҙенсәлекле ҡараш тәрбиәләү.

«Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының бурыстары:

– әҙәби уҡыу материалы аша танып белеү һәләтлектәрен һәм төрлө текстарҙың йөкмәткеһен һәм үҙенсәлектәрн аңлау, баһалау, анализлау;

– тарихи-мәҙәни, әхлаҡ, эстетик ҡиммәттәр сығанағы булған әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу уятыу;

– башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәрен өйрәнеү нигеҙендә туған (башҡорт) теленең әҙәби-эстетик мөмкинлектәре тураһында белемдәрен тулыландырыу;

– телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен дә үҫтереү, уҡылған әҫәрҙәр темаһы буйынса телдән һәм яҙма фекерҙәр формалаштырыу тәжрибәһе булдырыу.

**«Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының уҡыу планындағы урыны**

Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы рәүештә «Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметы «Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу» предмет өлкәһенә инә һәм мотлаҡ өйрәнелергә тейеш предмет булып иҫәпләнә.

Уҡытыу башҡорт телендә алып барылған белем биреү ойошмаларында предметты өйрәнеүгә 135 сәғәт бирелә.

**«Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметының йөкмәткеһе**

1-се класс

*Мин башҡорт телен өйрәнәм.* Башҡорт теле – беҙҙең туған тел.

*Танышыу.* Телефондан һөйләшеү. Уйын һәм уйынсыҡтар.

*Минең мәктәбем.* Беҙҙең класс. Беҙ дежур. Уҡыу кәрәк яраҡтары.Ҡайҙа? Һандар. Төҫтәр.Ғ. Ғүмәр "Ал сәскә лә бал бирә". Беҙҙең баҡса. Еләктәр. Йәшелсәләр. Йыл миҙгелдәре. Көҙгө эштәр. А.Йәғәфәрова "Һыйырҙың быҙауы бар". Аҙыҡ- түлек. Эсемлектәр. Муса Ғәли "Тамсыҡай".

*Мин һәм минең дуҫтарым.* Йорт хайуандары. Йорт ҡоштары. Мәжит Ғафури "Йәй". Ҡырағай хайуандар. Урманда. Тегенсе. М. Хисмәтуллина "Бесәй китте еләккә". Ауылдан өләсәй килде.Ҡыш. Йылғала. Йорт ҡураһында."Егәрле ҡыҙҙар". Башҡорт халыҡ әкиәте "Төлкө менән бүре".

*Мин һәм минең ғаиләм.* Ғаилә. Г.Ситдиҡова "Түңәрәк". Кейемдәр. Баш, өҫ кейемдәре. Милли кейем. Ф.Рәхимғолова "Өләсәйем бәхетле". Милли аштар. Һауыт – һаба. Ф.Туғыҙбаева "8 март".

*Минең республикам.* Өфө ҡалаһы. М.Ғәли “Тамсы". "Беҙҙең класта", "Уралда". Балалар фольклоры. Кешенең тән өлөштәре. Көн режимы. Ә.Ерикәй "Иртә менән торабыҙ". Уҡыусыға теләктәр . Ф.Туғыҙбаева "Өсәүләп сәй", "Минең ҡолоном". Уйындар. Йомаҡтар һәм мәҡәлдәр. Г.Юнысова "Барабан". К.Мәжит "Ҡоймаҡ менән ҡаймаҡ". Йорт хайуандары һәм ҡоштары.Р.Тимершин "Кәҙә". Ғ.Ғәлиәскәрова "Бөтәбеҙ бер ғаилә". Йыл миҙгелдәре.

2-се класс

Икенсе класта телмәр үҫтереү эше дауам ителә: өлгө буйынса диалогтар ҡороп һөйләшергә, һорауҙар биреп, уларға яуап ҡайтарырға өйрәтеү, уҡыу техникаһы һәм матур яҙыу өҫтөндә эш алып барыла. Лексик темалар киңәйтелеп бирелә.

*Мине уратып алған донъя.* Сәйәхәт, уның кешегә файҙаһы, әһәмиәте, сәйәхәт урындары, йүнәлештәре, спорт һәм сынығыу тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Факиһа Туғыҙбаева. Мин – уҡыусы. Шиғри әҫәр. Уның темаһы һәм исеме. Зөһрә Һаҙыеваның "Һәр һөнәр ҙә яҡшы" шиғырында төрлө һөнәрҙәрҙең әһәмиәте. Шиғри әҫәрҙең (рифма, ритм) үҙенсәлектәре. Аҙна көндәре. Факиһа Туғыҙбаеваның "Аҙна көндәре" шиғырының йөкмәткеһе. Сафуан Әлибайҙың "Беҙҙең мәктәптә һәйбәт" тиҙәйткесен үҙләштереү. Ғариф Ғүмәрҙең "Нисә алма?" һанашмағын үҙләштереү. Сағыштырыу. Фәүзиә Рәхимғолованың "Мин бер бөртөк малай" һанашмағында туғанлыҡ

әһәмиәте. Салауат Рәхмәтуллиндың "Ауырыным" шиғырында геройҙың портретын, ҡылыҡтарын, авторҙың геройға мөнәсәбәтен һәм уҡыусының геройға мөнәсәбәтен сағылдырған һүҙҙәр.

*Мин һәм минең ғаиләм.* Миңлеғөл Хисмәтуллинаның "Беҙҙең ғаилә" шиғырында хеҙмәт темаһы. Рәсимә Ураҡсинаның "Был-мин" шиғырында тән өлөштәрен үҙләштереү. Рауил Ниғмәтуллиндың "Әгәр тырышһаң" шиғырында тырышлыҡты һүрәтләү. Кәтибә Кинйәбулатованың "Бәлеш бешерҙем" шиғырында хеҙмәт темаһы. Гүзәл Ситдикованың "Өйҙә нисә әсәй?" йомағын үҙләштереү. Миңлеғөл Хисмәтуллинаның "Беҙҙең ғаилә" шиғырында хеҙмәт темаһы. Рәсимә Ураҡсинаның "Был-мин" шиғырында тән өлөштәрен үҙләштереү. Рауил Ниғмәтуллиндың "Әгәр тырышһаң" шиғырында тырышлыҡты һүрәтләү. Кәтибә Кинйәбулатованың "Бәлеш бешерҙем" шиғырында хеҙмәт темаһы. Гүзәл Ситдикованың "Өйҙә нисә әсәй?" йомағын үҙләштереү.

*Минең республикам.* Башҡортостандың бай тәбиғәте, үсемлектәре һәм хайуандар донъяһы. Тәбиғәттәге предметтарҙың исемдәре, уларға ҡыҫҡаса характеристика биреү. Йылғаларын, күлдәрен белеү. Тауҙар һәм урмандар. Тәбиғәтте һаҡлау тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Хәсән Шабановтың "Китап" шиғырында китапты хөрмәтләү. Муса Ғәлиҙең "Матур һүҙ" шиғырының идея-тематик йөкмәткеһе. Фәүзиә Рәхимғолованың "Өфө буйлап экскурсия" шиғырында тыуған яҡты данлау. Абдулхаҡ Игебаевтың "Аҡтүш" шиғырында дуҫлыҡ темаһы.Ҡадир Даян "Шыршы матур" йыры. Шиғри әҫәрҙең (ритм, рифма, рифм төрҙәре) үҙенсәлектәрен ҡабатлау. Шиғырҙар тематикаһы. Файыҡ Мөхәмәтйәновтың "Ҡышҡы һыуыҡ" шиғырында миҙгелдәр. Николай Сладковтың "Тылсымлы кәштә" әҫәрендә ҡоштарға ярҙам күрһәтеү. Рәми Ғариповтың "Сыйырсыҡ" шиғырында ҡоштар донъяһын һүрәтләү. Мостай Кәримдең "Осоп кил инде!" шиғырында ҡоштар темаһы. Ноғман Мусиндың "Урманда" хикәйәһенең идея-тематик йөкмәтке. Әкиәттәрҙә һүрәтләү саралары. Башҡорт халыҡ әкиәте "Эт үҙенә нисек хужа тапты?". Викторина, кроссвордтар, башватҡыстар төҙөү. Йомаҡтар, һанашмактар, тиҙәйткестәр.

3 –сө класс

*Мине уратып алған донъя.* Сәйәхәт, уның кешегә файҙаһы, әһәмиәте, сәйәхәт урындары, йүнәлештәре, спорт һәм сынығыу тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Килеш ялғауҙары, кире ҡағыу формаларын, *менән* бәйләүесен телмәрҙә ҡулланыу. Вәзих Исхаҡовтың "Минең хыялым" әҫәрендә һөнәрҙәргә ҡыҙыҡһыныу. Гөлфиә Юнысованың "Рәсем төшөрәбеҙ" хикәйәһенең идея-тематик йөкмәткеһе. Фәүзиә Рәхимғолованың "Йөҙ юл" шиғырында хеҙмәт темаһы. Зөфәр Хисмәтуллиндың "Уҡыуҙа ярҙам" хикәйһендә дуҫлыҡ темаһы. Мостай Кәримдең "Мәктәп хәтирәләре" әҫәрендә ихтирамлыҡ тәрбиәләү. Һынамыштар, тиҙәйткестәр. Уларҙың телмәрҙәге роле. Айһылыу Йәғәфәрованың "Ҡайсылар уйнай" тиҙәйткесен үҙләштереү. Кәтибә Кинйәбулатованың "Һин ҡайҙан?" һанамышында дуҫлыҡ темаһы.

*Мин һәм минең ғаиләм.* Ғаилә ағзалары, уларҙың үҙеңә туғанлыҡ мөнәсәбәттәре. Был атамаларҙы үҙләштереү. Темаға бәйләнешле яҡындарҙың эш-шөғөлдәре, уй-хыялдары, киләсәккә пландары. Ғаилә шәжәрәһе, уның әһәмиәте хаҡында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Башҡорт телендә бойороҡ һәм шарт һөйкәлешен практик үҙләштереү.

Уларҙың формаларын телмәрҙә ҡулланыу. Яҙыу һәм һөйләү күнекмәләрен камиллаштырыу. Рәис Низамовтың "Йомшаҡ ҡулдар" хикәйәһендә туғанлыҡ терминдары. Ынйыҡай Исламғолованың "Әсәйемә ярҙам итәм" хикәйһендә ярҙамсылыҡ тәрбиәләү. Раил Байбулатовтың "Атайыма ярҙам итәм" әҫәрендә образдарға характеристика. Әлфинур Вәхитованың "Тыуған көн" шиғырында дуҫлыҡ темаһы. Фирҙәүес Хисаметдинованың "Нимә ул шәжәрә?". Мәҡәләһенең идея-тематик йөкмәткеһе.

*Минең республикам-Башҡортостан.* Башҡортостандың бай тәбиғәте, үҫемлектәре һәм хайуандар донъяһы. Тәбиғәттәге предметтарҙың исемдәре, уларға ҡыҫҡаса характеристика биреү. Йылғаларын, күлдәрен белеү. Тауҙар һәм урмандар. Тәбиғәтте һаҡлау тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Башҡорт телендә тиң киҫәктәр. Һөйләмдә уларҙың ҡулланылышын практик үҙләштереү. Мостай Кәримдең "Нимә ул тәбиғәт?" өҙөгөндә тәбиғәт темаһы. Евгений Кучеровтың "Ҡанатлы дуҫтар" хикәйәһендә ҡоштар донъяһы. "Әминбәк" башҡорт халыҡ әкиәтендә хеҙмәт темаһы. "Төлкө һәм торна" рус халыҡ әкиәтендә образдарға характеристика. Заһир Мәхмүтовтың "Дүрт миҙгел" әкиәтендә миҙгелдәр темаһы. Башҡортостандың данлыҡлы урындары. Рауил Бикбаевтың "Салауат Юлаев һәйкәле" хикәйәһендә тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү. Факиһа Туғыҙбаеваның "Матур баш ҡалам" шиғырында тыуған ил темаһы. Фәрит Иҫәнғоловтың "Өфө урамдары" хикәйәһендә кешеләрҙең һәйбәт һәм насар сифаттары. Ғилемдар Рамазановтың "Башҡортостан бай ил" шиғырында тыуған ер матурлығы. Сөләймән Муллабаевтың "Йомарт йәй" шиғырында йәйге күренештәр. Фәрзәнә Ғөбәйҙуллинаның "Ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаев" хикәйәһендә образдарға характеристика. Башҡорт халыҡ йырҙарының үҙенсәлектәре. Башҡорт халыҡ йыры "Түңәрәк күл" дә тәбиғәт сағылышы. "Минең Уралым" ҡобайырында тыуған илде яҡлау темаһы.

4-се класс

Дүртенсе класта тирә - йүнде башҡорт телендә тәрәнерәк өйрәнеү нигеҙендә уҡыусыларҙың телмәр компетенцияһы үҫешә. Рус һәм башҡорт телдәрендәге тел күренештәрен анализлап, айырып, балалар башҡорт теленең нормаларын программаға ярашлы үҙләштерә.

*Мине уратып алған донъя.* Зәйнәб Биишеваның "Хәйерле көн" шиғыры. Тасуири уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү. Нәжиә Игеҙйәнованың "Уҡыу –ул хеҙмәт" хикәйәһе. Әҫәрҙең темаһы. Рәми Ғариповтың "Туған тел-һинең донъяң" шиғырының темаһы, идеяһы. Муса Ғәлиҙең "Сәғәт нимә һөйләй?" шиғырының темаһы, идеяһы. Мәжит Ғафури "Аҡ күл" хикәйәһендә тәбиғәт һүрәтләнеше.

*Мин һәм минең ғаиләм.* Р.Ниғмәтиҙең "Нимә ул Ватан?" шиғырының темаһы, идеяһы. Башҡорт халыҡ әкиәте "Олатайым васыяттары". Ә.Лотфуллиндың "Өс ҡатын" һәм "Әсәйем портреты" картиналары буйынса ижади эш.

*Башҡортостан - минең тыуған ерем.* "Урал батыр" эпосы (өҙөк). Әҫәрҙең анализы. Эпостың сюжеты (экспозиция, төйөнләнеү, кульминация, сиселеү). Луиза Ихсанованың "Башҡортостан – йырҙар иле" хикәйәһе. Халыҡ һәм автор йырҙарының айырмаһы. "Шайморатов генерал" йыры. Башҡорт ҡалалары. Текстың планы. Р. Әфләтуновтың

"Башҡорт бейеүе" хикәйәһе.Әҫәрҙең төҙөлөшө. Асылыкүл – Башҡортостан ынйыһы. Текстың төҙөлөшө. Мостай Кәримдең "Ҡайын япрағы тураһында" шиғырының темаһы, идеяһы. Йомаҡтар, мәҡәлдәр, тиҙәйткестәр.

**«Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» уҡыу предметын үҙләштереүҙең планлаштырылған һөҙөмтәләре**

«Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу» предмет өлкәһенә ҡараған «Туған (башҡорт) телендә әҙәби уҡыу» предметын өйрәнеү һөҙөмтәләре башланғыс белем биреү буйынса Федераль дәүләт белем биреү стандарттарында бирелгән башланғыс дөйөм белем биреү мәғариф программаһын үҙләштереү һөҙөмтәләренә ҡуйылған талаптарға тап килә.

**Шәхси һөҙөмтәләр**

1-4 кластарҙа «Туған (башҡорт) телдә әҙәби уҡыу» предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусыла түбәндәге шәхси һөҙөмтәләр формалаштырыла:

*граждандлыҡ-патриотик тәрбиә биреү:*

- Ватанға - Рәсәйгә ҡиммәтле мөнәсәбәт булдырыу;

- үҙеңдең этно-мәҙәни һәм Рәсәй граждандлыҡ берҙәмлеген аңлау;

- илебеҙҙең һәм тыуған төбәгебеҙҙең үткәненә, хәҙергеһенә һәм киләсәгенә ҡатнашлыҡ;

- үҙеңдең һәм башҡа халыҡтарға ихтирам;

- кеше тураһында, уның хоҡуҡтары һәм яуаплылығы, хөрмәте һәм кешелек дәрәжәһе, тәртиптең әхлаҡи-этик нормалары һәм шәхес-ара мөнәсәбәттәр ҡағиҙәләре тураһында тәүге төшөнсәләр;

*рухи-әхлаҡи тәрбиә биреү*:

- һәр кешенең индивидуаллеген таныу;

- ҡайғы менән уртаҡлашыу, хөрмәт итеү һәм изгелек ҡылыу;

- башҡа кешеләргә физик һәм әхлаҡи зыян килтереүгә йүнәлтелгән төрлө тәртип формаларын ҡабул итмәү;

*эстетик тәрбиә биреү:*

- сәнғәттең төрлө төрҙәренә, үҙебеҙҙең һәм башҡа халыҡтарҙың йолаларына һәм ижадына ихтирамлы мөнәсәбәт һәм ҡыҙыҡһыныу;

- төрлө художестволы эшмәкәрлек төрҙәрендә үҙ-үҙеңде күрһәтеүгә ынтылыу;

*физик тәрбиә биреү, һаулыҡ һәм эмоциональ именлек мәҙәниәтен булдырыу:*

- тирә-яҡ мөхиттә сәләмәт һәм хәүефһеҙ (үҙҙәре һәм башҡа кешеләр өсөн) йәшәү рәүеше (шул иҫәптән мәғлүмәти) ҡағиҙәләрен үтәү;

- физик һәм психик һаулыҡҡа һаҡсыл мөнәсәбәт;

*хеҙмәт тәрбиәһе биреү:*

- кеше һәм йәмғиәт тормошонда хеҙмәт ҡиммәттәрен аңлау, яуаплы ҡулланыу һәм хеҙмәт һөҙөмтәләренә һаҡсыл мөнәсәбәт, төрлө хеҙмәт эшмәкәрлегe төрҙәрендә ҡатнашыу күнекмәләре, төрлө һөнәрҙәргә ҡыҙыҡһыныу;

*экологик тәрбиә биреү:*

- тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш;

- уға зыян килтереүҙе ҡабул итмәү;

*ғилми танып белеү ҡиммәттәре:*

- донъяның фәнни картинаһы тураһында тәүге төшөнсәләр;

- танып белеү ҡыҙыҡһыныуҙары, әүҙемлеге, инициативалылығы, ҡыҙыҡһыныусанлығы һәм үҙаллылығы.

**Метапредмет һөҙөмтәләре**

1-4 кластарҙа «Туған (башҡорт) телдә әҙәби уҡыу» уҡыу предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы универсаль белем биреү сараларына эйә була:

*төп логик ғәмәлдәр:*

- төрлө текстарҙы сағыштырырға, текстарҙы сағыштырыу нигеҙҙәрен билдәләргә, текстарҙың аналогтарын билдәләргә;

- өлөштәрҙән бөтөндө йыйыу (бирелгән үҙенсәлектәре буйынса текстар);

- текстарҙы классификациялау өсөн мөһим билдәне билдәләргә, тәҡдим ителгән текстарҙы классификацияларға;

- текст материалында уҡытыусы тәҡдим иткән күҙәтеү алгоритмы нигеҙендә законлылыҡтарҙы һәм ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы табыу;

- тәҡдим ителгән алгоритмға нигеҙләнеп уҡыу һәм практик бурысты хәл итеү өсөн мәғлүмәттең етешмәүен асыҡларға;

- тексты анализлағанда сәбәп-тикшереү бәйләнештәрен билдәләргә, һығымта яһарға;

*өн тикшеренеү ғәмәлдәре:*

- уҡытыусы ярҙамында маҡсат билдәләргә;

- бурысты хәл итеүҙең бер нисә вариантын сағыштырып, иң ҡулайын һайлап алырға (тәҡдим ителгән критерийҙар нигеҙендә);

- тәҡдим ителгән планға ярашлы проект эшен башҡарырға;

- текст анализы һөҙөмтәләре нигеҙендә һығымталар төҙөргә һәм уларҙы дәлилдәр менән нығытырға (классификациялау, сағыштырыу, тикшереүҙәр);

Оҡшаш йәки оҡшаш хәлдәрҙә процестарҙың, ваҡиғаларҙың үҫешеү ихтималлығын һәм уларҙың эҙемтәләрен күҙалларға;

*мәғлүмәт менән эшләү:*

- мәғлүмәт алыу сығанағын һайлау: һүҙлек, белешмә;

- күрһәтелгән алгоритмға ярашлы, мәғлүмәтте тәҡдим ителгән сығанаҡта (һүҙлектә, белешмәлә) табырға;

- дөрөҫ һәм дөрөҫ булмаған мәғлүмәтте үҙаллы йәки уҡытыусы тәҡдим иткән тикшереү ысулы нигеҙендә асыҡларға (һүҙлектәр, белешмәләр ярҙамында);

- Интернет селтәрендә мәғлүмәт эҙләгәндә өлкәндәр (уҡытыусылар, ата-әсәләр/законлы вәкилдәр) ярҙамында мәғлүмәт хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен үтәргә;

- уҡыу бурысына ярашлы текст, видео, график, тауыш, мәғлүмәтте анализларға һәм булдырырға;

- таблица, схема рәүешендә теркәлгән мәғлүмәтте аңларға, текстар менән эш һөҙөмтәләре буйынса схемаларҙы, таблицаларҙы үҙаллы булдырырға кәрәк.

1-4-се кластарҙа «Туған (башҡорт) телдә әҙәби уҡыу» уҡыу предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы универсаль уҡыу-коммуникатив ғәмәлдәргә эйә була:

*аралашыу:*

- фекерҙәрҙе ҡабул итергә һәм формалаштырырға, хис-тойғоларҙы таныш булған мөхиттә аралашыу маҡсаттарына һәм шарттарына ярашлы белдерергә;

- әңгәмәсегә ихтирамлы мөнәсәбәт күрһәтергә, диалог һәм дискуссия алып барыу ҡағиҙәләрен үтәргә;

- төрлө фекерҙәр барлығын танырға;

- үҙ фекеренде әҙәпле һәм нигеҙле әйтергә;

- ҡуйылған бурысҡа ярашлы телмәр әйтеү төҙөргә;

- телдән һәм яҙма текстар (һүрәтләү, фекерләү, хикәйәләү) яҙырға;

- ҙур булмаған асыҡ сығыштар әҙерләргә;

Сығыштың тексына һүрәттәрҙе (һүрәттәрҙе, фотоларҙы, плакаттарҙы) һайларға;

*берлектәге эшмәкәрлек:*

- планлаштырыуҙың тәҡдим ителгән форматы, аралыҡ аҙымдарын һәм ваҡыттарын бүлеү нигеҙендә стандарт (типлы) хәлдә ҡыҫҡа ваҡытлы һәм оҙайлы сроклы маҡсаттар (шәхси) төҙөргә;

- уртаҡ эшмәкәрлектең маҡсатын ҡабул итергә, уға ирешеү буйынса күмәкләп эш алып барырға: ролдәрҙе бүлергә, һөйләшеп килешергә, процесты һәм уртаҡ эштең һөҙөмтәһен тикшерергә;

- етәкселек итергә, йөкләмәләр үтәргә, буйһонорға әҙер булырға;

- эштең үҙ өлөшөн яуаплы башҡарырға;

- дөйөм һөҙөмтәгә индергән өлөшөгөҙҙө баһаларға;

- тәҡдим ителгән өлгөләргә таянып, берлектәге проект эштәрен башҡарырға.

1-4-се кластарҙа «Туған (башҡорт) телдә әҙәби уҡыу» уҡыу предметын өйрәнеү һөҙөмтәһендә уҡыусы универсаль уҡыу-көйләү эшенә эйә була:

*үҙ-үҙен ойоштороу*:

- һөҙөмтә алыу өсөн уҡыу бурысын хәл итеү буйынса эште планлаштырырға;

- һайланған эштәрҙең эҙмә-эҙлелеген билдәләү;

*үҙ аллы контроль:*

- эшмәкәрлектең уңышһыҙ булыу сәбәптәрен асыҡларға;

- телмәр һәм орфография хаталарын еңеп сығыу өсөн уҡыу ғәмәлдәренә төҙәтмәләр индерергә;

- алынған һөҙөмтәне тексты анализлау буйынса ҡуйылған уҡыу бурысы менән тура килтерергә;

- текст менән эшләгәндә ебәрелгән хаталарҙы табырға һәм төҙәтергә.

**Предмет һөҙөмтәләре**

1-4 кластарҙа «Туған (башҡорт) телдә әҙәби уҡыу» уҡыу предметын өйрәнеүҙәр түбәндәгеләр менән тәьмин итә:

- Рәсәй Федерацияһының берҙәм мәҙәни киңлегендә, Рәсәй Федерацияһы халыҡтары әҙәбиәттәре араһында башҡорт әҙәбиәтенең урынын һәм ролен тарихи-мәҙәни, әхлаҡи, эстетик ҡиммәттәрҙе һаҡлауҙа һәм быуындан быуынға тапшырыуҙа аңлау;

- төрлө халыҡтар әҙәбиәтенең үҙ-ара йоғонтоһо, бер-береһен байытыуы, айырыуса мәҙәни, әхлаҡи-этик һәм эстетик киңлек булдырыуҙа башҡорт халҡы фольклорының һәм художестволы әҙәбиәтенең роле тураһында тәүге төшөнсәләр;

- мәғәнәле уҡыуҙы үҙләштереү, әҙәбиәт теорияһының ябай төшөнсәләренең мәғәнәһен һәм мәғәнәһен аңлау (ҡысҡырып уҡыу, үҙең хаҡында уҡыу, художество һәм фольклор әҫәрҙәре жанрҙары, уҡыған әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлау, башҡорт теленең һынлы һәм тасуирлау саралары);

- тексга бирелгән мәғлүмәтте ҡабул итеүгә ылыҡтырыу, уҡыусыларҙың эстетик зауығын һәм ҡыҙыҡһыныуын формалаштырыу (танышыу, өйрәнеү, һайланма, эҙләнеү),

текст менән эшләү (тексҡа һорауҙар, текст планы), ролдәр буйынса уҡыу, ижади эштәр башҡарыу.

**Тематик планлаштырыу**

1-се класс

| Тема | Сәғәт һаны |
|---|---|
| Әлифбаға тиклемге осор | 19 |
| Грамотаға өйрәтеү: уҡыу, яҙыу, телмәр үҫтереү | 14 |
| Бөтәһе | 33 |

2-се класс

| Тема | Сәғәт һаны |
|---|---|
| Мине уратып алған донъя | 9 |
| Мин һәм минең ғаиләм | 6 |
| Минең республикам- Башҡортостан | 15 |
| Ҡабатлау | 4 |
| Бөтәһе | 34 |

3-сө класс

| Тема | Сәғәт һаны |
|---|---|
| Мине уратып алған донъя | 8 |
| Мин һәм минең ғаиләм | 5 |
| Минең республикам- Башҡортостан | 21 |
| Бөтәһе | 34 |

4-се класс

| Тема | Сәғәт һаны |
|---|---|
| Мине уратып алған донъя | 9 |
| Мин һәм минең ғаиләм | 7 |
| Тыуған ерем- Башҡортостан | 17 |
| Ҡабатлау | 1 |
| Бөтәһе | 34 |

1-се класс

| **Дәрес һаны** | **Тема буйынса дәрес һаны** | **Дәрес темаһы** | **Дата** | | **Иҫкәрмә** |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | **План буйынса** | **Фактик** | |
| | | | | | |
| 1 | 1 | Мин башҡорт телен өйрәнәм. | | | |
| 2 | 2 | Башҡорт теле – беҙҙең туған тел. | | | |
| 3 | 3 | Сәләмләү, танышыу, хушлашыу. | | | |
| 4 | 4 | Предмет һәм һүҙ. Исем, фамилия, атаһының исеме тураһында мәғлүмәт. | | | |
| 5 | 5 | Телефондан һөйләшеү. Предметтың атамаһын белдергән һүҙәр. | | | |
| 6 | 6 | Уйын һәм уйынсыҡтар. Предметтың атамаһын белдергән | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | һүҙҙәр. | | | |
| 7 | 7 | Мәктәп.Уҡыу кәрәк-ярағтары. Һүҙ. Һүҙ моделе. Нимә? һорауы | | | |
| 8 | 8 | Класта дежур булыу. Уйынсыҡтар. Һүҙҙәге ижектәр. Һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеү. | | | |
| 9 | 9 | Һандар. Нисә? Күпме? һорауҙары. 1-10-ға тиклемге һандар. Тәнәфес. | | | |
| 10 | 10 | Төҫтәр. Предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәр. Ниндәй? һорауы.Тиҙәйткестәр. | | | |
| 11 | 11 | Кейем магазинында. Өн. Өн моделе. | | | |
| 12 | 12 | Аҙыҡ-түлек магазинында. Һуҙынҡы өндәр. | | | |
| 13 | 13 | Минең этем. Тартынҡы өндәр. | | | |
| 14 | 14 | Минең бесәйем.Телмәр үҫтереү. | | | |
| 15 | 15 | Минең яратҡан сәскәм. Нәҙек, ҡалын өндәр.Уларҙың моделе. | | | |
| 16 | 16 | Баҡсала гөлләмә йыябыҙ. Нәҙек, ҡалын ижектәр.Уларҙың моделе. | | | |
| 17 | 17 | Беҙҙең уйындар. Һөйләмдә һүҙҙәрҙең килеү тәртибе. | | | |
| 18 | 18 | Телмәр үҫтереү. Кинотеатрға барабыҙ. Баҫым, һүҙҙең өн моделе. | | | |
| 19 | 19 | Кейемдәр. Баҫым. Хәбәр һөйләмдәр. | | | |
| 20 | 20 | Милли кейемдәр. Һорау һөйләмдәр. | | | |
| 21 | 21 | Текст менән танышыу. *Нимә?* һорауына яуап биреүсе һүҙҙәр. | | | |
| 22 | 22 | Айһылыу Йәғәфәрованың «Һыйырҙың быҙауы бар...» шиғыры. Беҙҙең баҡса. Баҡсала низәр үҫә? | | | |
| 23 | 23 | Муса Ғәлиҙең «Тамсыҡай» йомағы. Елək-емештәр. Урманда ниндәй ағастар үҫә? | | | |
| 24 | 24 | Мәрйәм Бикбованың «Аҡ ҡуян, йомшаҡ ҡуян» әҫәре. Ҡырағай хайуандар. | | | |
| 25 | 25 | Фәрзәнә Ғөбәйҙуллинаның «Кем минең әсәйем? әкиәте. Йорт хайуандары һәм ҡоштары. | | | |
| 26 | 26 | Ф. Туғыҙбаеваның «8 Март» шиғырында ғаилә темаһы. Ата-әсәләрҙең шөғөлө. Йорт эштәрендә ярҙам. | | | |
| 27 | 27 | Г. Ситдикованың «Түңәрәк» һанашмағы. Аҙна көндәре. Туҡланыу: иртәнге аш, төшкө аш, киске аш. | | | |
| 28 | 28 | Ф. Рәхимғолованың «Бутҡа | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | бешерҙек» шиғыры. Беҙҙең байрамдар: минең тыуған көн . Башҡорттарҙың милли аштары. | | | |
| 29 | 29 | М. Ғафуриҙың «Йәй» шиғыры.Тыуған ил,тыуған ҡалам. | | | |
| 30 | 30 | Башҡорт халыҡ әкиәте «Төлкө менән бүре». | | | |
| 31 | 31 | Башҡорт халыҡ йомаҡтары, тиҙәйткестәр, тел шымартҡыстар. Беҙҙең байрамдар. | | | |
| 32 | 32 | Ҡурсаҡ театры. Өләсәйгә ҡунаҡҡа. | | | |
| 33 | 33 | Уйлат- уйнат баланы.Үтелгәнде ҡабатлау. | | | |

**2-се класс**

| Дәрес һаны | Тема буйынса дәрес һаны | Дәрес темаһы | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План буйынса | Фактик | |
| | | | | | |
| 1 | 1 | Фәүзиә Рәхимғолованың “Мин бер малай” шиғыры.Һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе. | | | |
| 2 | 2 | Факиһа Туғыҙбаеваның “Мин уҡыусы”шиғырының төп геройы. Лирик әҫәрҙә һүҙ. | | | |
| 3 | 3 | Сафуан Әлибаевтең “Беҙҙең мәктәптә һәйбәт” тиҙәйткесе. Шиғри әҫәрҙә һәм хикәйәлә һүҙҙәр. | | | |
| 4 | 4 | Ғариф Ғүмәр “Нисә алма?” һанашмағы.Һүҙҙең күсмә мәғәнәһе. | | | |
| 5 | 5 | Факиһа Туғыҙбаеваның “Аҙна көндәре”шиғырының төп геройҙары. | | | |
| 6 | 6 | Зөһрә Һаҙыеваның “Һәр һөнәр ҙә яҡшы”әҫәрендә һөнәрҙәргә ҡыҙыҡһыныу.Антонимдар, синонимдар, сағыштырыу төшөнсәләрен өйрәнеү. | | | |
| 7 | 7 | Салауат Рәхмәтуллинден “Ауырыным” хикәйәһе. “Мине уратып алған донъя” темаһы буйынса тикшереү эше | | | |
| 8 | 8 | Миңлегөл Хисматуллинаның “Минең ғаиләм”шиғырында туғанлыҡ хистәре. | | | |
| 9 | 9 | Рәсимә Ураҡсинаның “Был- мин” шиғырында бер- береһенә ҡарата хөрмәтләү хисе. | | | |
| 10 | 10 | Айһылыу Йәғәфәрованың “Мин уяндым” тиҙәйткесе. | | | |
| 11 | 11 | Рауил Ниғмәтуллинден “ Әгәр | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | тырышһаң” һанашмағы. | | | |
| 12 | 12 | Гүзәл Ситдиҡованың йомаҡ-шиғыры “Өйҙә нисә әсәй?”. | | | |
| 13 | 13 | “Мин һәм минең ғаиләм” темаһы буйынса тикшереү эше. ”. Кәтибә Кинйәбулатова “Бәлеш бешерҙем” шиғыры | | | |
| 14 | 14 | Хәсән Шабановтың “Китап” тиҙәйткесендә китапҡа һөйөү тәрбиәләү. | | | |
| 15 | 15 | Муса Ғәлиҙең “Матур һүҙ”шиғырында кешеләргә ҡарата матур сифаттар тәрбиәләү. | | | |
| 16 | 16 | Фәүзиә Рәғимғолованың “Өфө буйлап экскурсия” шиғырында тыуған ил темаһы.. | | | |
| 17 | 17 | Абдулхаҡ Игебаевтың «Аҡтүш»шиғыры. Шиғри әҫәрҙең үҙенсәлеге. | | | |
| 18 | 18 | Ҡадир Даяндың  “Шыршы матур” йырында рифма, ритм. | | | |
| 19 | 19 | Файыҡ Мөхәмәтйәновтың“Ҡышҡы һыуыҡ” йомағы. Йомаҡ жанры үҙенсәлеге. | | | |
| 20 | 20 | Тамара Искәндәрованың“Ҡар яуа” йыры. Поэтик әҫәр үҙенсәлеге. | | | |
| 21 | 21 | Николай Сладковтың “Тылсымлы кәштә”әҫәрендә геройға характеристика. | | | |
| 22 | 22 | Рәми Ғариповтың “Сыйырсыҡ”шиғырында тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү. | | | |
| 23 | 23 | Мостай Кәримдең “Осоп кил инде!” шиғырында лирик герой образы. | | | |
| 24 | 24 | Ноғман Мусиндың “Урманда” хикәйәһенең төп геройы. | | | |
| 25 | 25 | Әкиәт тураһында төшөнсә. Әкиәт төрҙәре. Хайуандар тураһында әкиәттәр. | | | |
| 26 | 26 | Тылсымлы әкиәттәрҙең формаһы. | | | |
| 27 | 27 | Көнкүреш тураһында әкиәттәрҙең композицияһы. | | | |
| 28 | 28 | Башҡорт халыҡ әкиәте “Эт үҙенә нисек хужа тапты?  Әкиәттә ҡулланылған образлы алымдар. | | | |
| 29 | 29 | Башҡорт халыҡ ижады.Йомаҡтар. | | | |
| 30 | 30 | Мәҡәлдәр. | | | |
| 31 | 31 | “Минең республикам - Башҡортостан” темаһы буйынса тикшереү эше | | | |
| 32 | 32 | Фольклорҙың төрлө жанрҙарын айырыу. Әкиәттәр буйынса | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | ижади эш. | | | |
| 33 | 33 | Тел төҙәткестәр,тел шымартҡыстар,һанашмаҡтар өйрәнәбеҙ. | | | |
| 34 | 34 | Йыл буйына үтелгәндәрҙе ҡабатлау | | | |

**3-сө класс**

| Дәрес һаны | Тема буйынса дәрес һаны | Дәрес темаһы | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План буйынса | Фактик | |
| | | | | | |
| 1 | 1 | Кәтибә Кинйәбулатованың “Һин ҡайҙан?” һанашмағында дуҫлыҡ темаһы. | | | |
| 2 | 2 | Зөфәр Хисмәтуллиндың “Уҡыуҙа ярҙам” хикәйһендә дуҫлыҡ темаһы.Әҫәр төҙөлөшө. | | | |
| 3 | 3 | Мостай Кәримдең “Мәктәп хәтирәләре” өҙөгө нигеҙендә текст өлөштәрен өйрәнеү. | | | |
| 4 | 4 | Айһылыу Йәғәфәрованың “Ҡайсылар уйнай” тиҙәйткесен .Көлкөлө , шаярыу әҫәрҙәре үҙенсәлеге. | | | |
| 5 | 5 | Гөлфиә Юнысованың “Рәсем төшөрәбеҙ” хикәйәһенең идея-тематик йөкмәткеһе. | | | |
| 6 | 6 | Фәүзиә Рәхимғолованың “Йөҙ юл” шиғырында хеҙмәт темаһы. | | | |
| 7 | 7 | Вәзих Исхаҡовтың “Минең хыялым” хикәйәһенең идеяһы. “Мине уратып алған донъя” темаһы буйынса тикшереү эше. | | | |
| 8 | 8 | Рәис Низамовтың “Йомшаҡ ҡулдар” хикәйәһендә туғанлыҡ терминдары. | | | |
| 9 | 9 | Ынйыҡай Исламғолованың “Әсәйемә ярҙам итәм” хикәйәһендә ярҙамсылыҡ тәрбиәләү. | | | |
| 10 | 10 | Раил Байбулатовтың “Атайыма ярҙам итәм” әҫәрендә образдарға характеристика. | | | |
| 11 | 11 | Әлфинур Вәхитованың “Тыуған көн” шиғырында дуҫлыҡ темаһы. | | | |
| 12 | 12 | Фирҙәүес Хисаметдинованың“Нимә ул шәжәрә? Мәҡәләһенән өҙөк. | | | |
| 13 | 13 | Белешмә материалдар .«Минең исемем нимә аңлата?» темаһы буйынса проект эше. | | | |
| 14 | 14 | Мостай Кәримдең “Нимә ул тәбиғәт?” өҙөгөндә тәбиғәт темаһы . | | | |
| 15 | 15 | Тәнзилә Дәүләтбирҙинаның “Мәктәп йылдары” хикәйәһенең төп фекере. | | | |
| 16 | 16 | “Әминбәк” әкиәтендә хеҙмәт темаһы. | | | |
| 17 | 17 | Башҡортостан йылғалары һәм күлдәре. | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | Фаҡиһа Туғыҙбаева. “Матур баш ҡалам” шиғырында тыуған ил темаһы. | | | |
| 18 | 18 | Рауил Бикбаевтың “Салауат Юлаев һәйкәле” хикәйәһендә тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү. | | | |
| 19 | 19 | Фәрит Иҫәнғоловтың “Өфө урамдары” хикәйәһендә кешеләрҙең яҡшы һәм яман сифаттары. | | | |
| 20 | 20 | Ғилемдар Рамазановтың “Башҡортостан бай ил” шиғырында тыуған ер матурлығы. “Мин һәм минең ғаиләм”,” Минең тыуған яғым -Башҡортостан” темалары буйынса тикшереү эше. | | | |
| 21 | 21 | Фәрзәнә Ғөбәйҙуллинаның“Ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаев” хикәйәһендә образдарға характеристика. | | | |
| 22 | 22 | “Төлкө һәм торна” әкиәтендә образдарға характеристика. | | | |
| 23 | 23 | “Түңәрәк күл” башҡорт халыҡ йырында тәбиғәт сағылышы.Лирик әҫәр үҙенсәлеге. | | | |
| 24 | 24 | Евгений Кучеровтың “Канатлы дуҫтар” хикәйәһендә ҡоштар донъяһы. | | | |
| 25 | 25 | Сөләймән Муллабаевтың “Йомарт йәй” шиғырында йәйге күренештәр. | | | |
| 26 | 26 | Минең Уралым” ҡобайырында тыуған илде яҡлау темаһы. | | | |
| 27 | 27 | Рауил Бикбаевтың “Бөйөк Еңеү” хикәйәһендә ғорурлыҡ тойғоһон уятыу. «Минең тыуған яғым -Башҡортостан » темаһы буйынса тикшереү эше. | | | |
| 28 | 28 | Заһир Мәхмүтовтең “Дүрт миҙгел” әкиәтендә миҙгелдәр темаһы. | | | |
| 29 | 29 | Миҙгелдәргә ярашлы балаларҙың уйындары. | | | |
| 30 | 30 | Башҡорт халыҡ йырҙарының үҙенсәлектәре. | | | |
| 31 | 31 | Башҡортостан йылғалары һәм күлдәре. | | | |
| 32 | 32 | Башҡорт халыҡ ижадының бәләкәй жанрҙары:йомаҡтар,мәҡәлдәр. | | | |
| 33 | 33 | Һамаҡтар,һанашмаҡтар,тиҙәйткестәр,тел төҙәткестәр. | | | |
| 34 | 34 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Ребустар, кроссвордтар сисәбеҙ! | | | |

**4-се класс**

| Дәрес һаны | Тема буйынса дәрес һаны | Дәрес темаһы | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План буйынса | Фактик | |
| | | | | | |
| 1 | 1 | Зәйнәб Биишеваның «Хәйерле көн» шиғыры. Әҫәр исеменең йөкмәткене асыуҙағы роле. | | | |
| 2 | 2 | Фakиһа Туғыҙбаеваның “Тәмле | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | һүҙҙәр" хикәйәһенең темаһы , идеяһы. | | | |
| 3 | 3 | Валентина Осееваның «Тылсымлы һүҙҙәр» хикәйәһе идея- тематик йөкмәткеһе. | | | |
| 4 | 4 | Нәжиә Игеҙйәнованың «Уҡыу – ул хеҙмәт» хикәйәһе. Сюжет төрҙәре. | | | |
| 5 | 5 | Рәми Ғариповтың «Тыуған тел-һинең донъяң» шиғыры. | | | |
| 6 | 6 | Муса Ғәлиҙең "Сәғәт нимә һөйләй ?"тиҙәйткесе. «Мине уратып алған донъя» бүлеге буйынса тикшереү эше. | | | |
| 7 | 7 | Мәжит Ғафуриҙың "Аҡкүл" хикәйәһендә тәбиғәт һүрәтләнеше. | | | |
| 8 | 8 | Зәйнәб Биишеваның"Талҡаҫ күле» хикәйәһе. Текст төрҙәре. | | | |
| 9 | 9 | " Шихандар –тәбиғәт ҡомартҡылары. "Башҡортостандың тәбиғәт ҡомартҡылары" темаһына проект эше. | | | |
| 10 | 10 | Р.Ниғмәтиҙең"Нимә ул Ватан?» шиғырының темаһы, идеяһы. | | | |
| 11 | 11 | Р.Фәхретдиновтың «Тәрбиәле бала" хикәйәһенең темаһы,идеяһы. | | | |
| 12 | 12 | А.Рамазанованың "Ялҡаулыҡ кешене боҙа» хикәйәһе.Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. | | | |
| 13 | 13 | "Олатайым васыяттары " башҡорт халыҡ әкиәтенең тәрбиәүи әһәмиәте. | | | |
| 14 | 14 | М.Сәлимовтың"Алдашыу –насар ғәҙәт" юмаристик хикәйәһенең темаһы,идеяһы | | | |
| 15 | 15 | Көлкөлө әҫәрҙәрҙә ҡулланылған һүрәтләү саралары." Мине уратып алған донъя", "Мин һәм мине уратып алған донъя" темалары буйынса тикшереү эше. | | | |
| 16 | 16 | Рәссам Ә.Лотфуллин ижады. "Әсәйем портреты" картинаһы менән танышыу . Ижади эш. | | | |
| 17 | 17 | Л.Ихсанованың "Башҡортостан йырҙар иле" фәнни-популяр тексты. Халыҡ һәм автор йырҙарының айырмаһы . | | | |
| 18 | 18 | Ҡ.Даян һүҙҙәре, З.Исмәғилев музыкаһына яҙылған"Шайморатов генерал" йыры. | | | |
| 19 | 19 | Р. Афлятуновтың «Башҡорт | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | бейеүе» хикәйәһе. Хикәйә жанры үҙенсәлеге. | | | |
| 20 | 20 | Василий Власовтың«Башҡорт балы» фәнни- популяр тексты. “Минең өләсәйемдең тәмле аштары”темаһына проект эше | | | |
| 21 | 21 | Фәнни- популяр текст «Ҡымыҙ». Сюжет төрҙәре. | | | |
| 22 | 22 | Башҡорт халыҡ әкиәте «Ҡурай». Әкиәт төрҙәре. | | | |
| 23 | 23 | Мостай Кәримдең «Ҡайын япрағы тураһында» шиғырының темаһы, идеяһы. | | | |
| 24 | 24 | Башҡорт халыҡ әкиәте “Ирәндек”. Әҫәрҙең төп фекере. | | | |
| 25 | 25 | Эпос тураһында төшөнсә.Урал батыр эпосы (өҙөк). | | | |
| 26 | 26 | «Уралда» ҡобайыры.Ҡобайыр жанры үҙенсәлектәре. | | | |
| 27 | 27 | «Башҡортостан ҡалалары» (фәнни-популяр текст) | | | |
| 28 | 28 | Көләмәс тураһында төшөнсә. «Башҡорттарҙың милли кейеме» темаһына проект эше. | | | |
| 29 | 29 | «Ҡариҙел», «Ҡыш, һау бул!» пейзаж картиналары буйынса рәссам Александр Бурзянцев ижады менән танышыу. | | | |
| 30 | 30 | Фольклорҙың бәләкәй жанрҙары:йомаҡтар, мәҡәлдәр. | | | |
| 31 | 31 | Асылыкүл – Башҡортостан ынйыһы. «Башҡортостан- минең тыуған ерем » бүлеге буйынса тикшереү эше. | | | |
| 32 | 32 | Рәсәйҙә тәүге яҙма китаптар. Ҡол Ғәли «Ҡиссаи Йософ» | | | |
| 33 | 33 | Башҡорт балаларын уҡытыу өсөн баҫтырылған В.В.Катаринскийҙың тәүге әлифбаһы(1892й). | | | |
| 34 | 34 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.Уйлат-уйнат баланы. | | | |

**Өйрәтеү материалдары**

1. Башҡорт халыҡ ижады. Беренсе китап. Йырҙар. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 2008. – 318 б.
2. Башҡорт халыҡ ижады. 8-се том. Эпос: иртәктәр һәм эпик ҡобайырҙар. – Өфө: Китап, 2006. – 492 б.
3. Башҡорт халыҡ ижады. 11-се том. Новеллистик әкиәттәр. – Өфө: Китап, 2008. – 568 б.
4. Ураксин З. Г. Фразеологический словарь башкирского языка. – Обновлённый, 2-ой выпуск. – Уфа: Китап, 2006. – 344 с.
5. Русско-башкирский словарь. В 2-х т. / под ред. З. Г. Ураксина. – Уфа: Башкирская энциклопедия, 2005. – Т. I – 808 с.; Т. II – 680 с.
6. Галяутдинов И. Г Башкирские народные детские игры. – Уфа: Китап, 2002. – 248 с.
7. Башкирское народное творчество: Фольклор обычаев. Т.1. / Составитель. А. М. Сулейманов. – Уфа: Китап, 1995. – 560 с.
8. Хөсәйенов Ғ. Б. Башҡорт әҙәбиәтенең поэтикаһы. Беренсе киҫәк. Теоретик поэтика / Ғ. Б. Хөсәйенов – Өфө: Ғилем, 2006. – 403 б.
9. Хөсәйенов Ғ. Б. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2006. – 248 б.
10. Хадыева Р. Н. Этнолингвистический словарь башкирского языка. – Уфа, 2002. – 176 с.
11. Әхмәтйәнов К. Ә. Әҙәбиәт теорияһы. – Үҙгәрешле 3-сө баҫма. – Өфө: Китап, 2003. – 392 б.

**Мәғлүмәт ресурстары**

12. Башкирское издательство «Китап» им. З. Биишевой // URL: http://www.kitap-ufa.ru/information/elektronnye-uchebnye-posobiya.php (дата обращения: 3.07.2022).
13. Башҡортса википедия. Ирекле энциклопедия // URL: https://ba.wikipedia.org/wiki/%D0%91%D0%B0%D1%88_%D0%B1%D0%B8%D1%82 (дата обращения: 3.11.2021).
14. Башкорт теле // URL: http://tel.bashqort.com (дата обращения: 3.11.2021).
15. Отдел башкирской литературы и краеведения // URL: http://www.bashnl.ru/en/o-biblioteke/struktura-biblioteki/otdel-bashkirskoy-literatury/ (дата обращения: 03.07.2022).
16. Сайт изучения башкирского языка // URL: http://tel.bashqort.com (дата обращения: 03.07.2022).
17. Сайт национальной библиотеки им. Валиди // URL: http://www.bashnl.ru (дата обращения: 03.07.2022).